


# АРҒУЖА

*Башкорт телендә махсус бит №3 (106)*
*Март, 2019 йыл*


Шиғриәт

## *БАШКОРТОСТАН*

*Башкортостан!*
*Күпме йыр бар икән*
*Ғорур һынлы һинең исемгә?!*
*Һинең данлы юлың,*
*көс-ғәйрәтең,*
*Үлгәндә лә сыкмаç иçемдән.*
*Ирәмәлем, мәғрүр Янғантауым*
*Олпатланған күпте күреүҙән,*
*Армыт-армыт ята*
*һыртлауҙарың,*
*Затлы мәрйен кеүек теҙелгән.*
*Кояш нурҙарында гәлсәр кеүек*
*Урғып аға шишмә һыуҙарың,*
*Шул һыуҙарҙы эсеп*
*үçкәнгә бит*
*Батыр улдар, матур кыҙҙарың.*
*Арыш басыуҙарың*
*йәшел бәрхәт,*
*Кот-бәрәкәт бында һибелгән,*
*Бал корттары кеүек*
*башкорттарым*
*“Икмәк!” — тиеп, ергә эйелгән.*
*Эй, Уралым, һинең күкрәгендә*
*Сал быуаттар һалған эҙҙәр бар,*
*Һине данлап, халкым йөрәгендә*
*Бөтмәй генә торған*
*йырҙар бар.*

**Ҡамса МОРТАЗИН.**

## *ТЫУҒАН АУЫЛЫМ*

*Һәр кемдең дә тыуған иле була,*
*Тыуған ерен һөйөп ярата,*
*Ә мин Мәсәйҙә тыуғанмын,*
*Шуға ла мин уны яратам.*
*Күңелем менән*
*ауылымды байкап*
*Инеп сығам һәр бер йортка,*
*Был өйҙөң, тим,*
*хужалары бик шәп,*
*Ә былары бик тә уңғандар.*
*Ауыл осона торам да*
*Карайым мин “забуйға”,*
*Бала сакта шунда һыу ингәнем*
*Килеп төшә уйҙарыма.*
*Йәштәштәрем күҙ*
*алдында минең,*
*Хәтеремдә һәр бер көндәрем,*
*Әйтерһең дә әле генә ине*
*Улар менән үткән көндәрем.*
*Татыу ғына булып*
*эшкә сыға инем*
*Колхоздың басыуына,*
*Кыҙҙар менән еләк йыйҙык*
*Оло йәшел болонда.*
*Күпме вакыт үтеп китте инде,*
*Байтак һыуҙар ҙа акты,*
*Әбей-бабайҙар ҙа хәҙер*
*Фани донъянан китте.*
*Һәр бер өйҙөң хужаһына*
*Баһа бирәм һокланып,*
*Беҙҙең ауыл Мәсәй бит ул,*
*Йәшә һин, ғорур булып!*

**Таңһылыу ҺИБӘТУЛЛИНА,**
**Ҡорман ауылы.**

### Мәкәлдәр һәм әйтемдәр

Ата менән әсә — алтын канат.

Атанан күргән — ук юнған, әсәнән күргән — тун бескән.

Атына карама, затына кара.

Башты ташка ороп булмай.

Баш һау булһа, бүрек табылыр.

Башка бәлә төшмәй акыл кермәй.

Белмәгәндең беләге тыныс.

Йоморткa тауыкты өйрәтмәй.

Донъя куласа, әйләнә лә бер баса.

Конкурс

# Күңел байрамы

***Дәрүиш урта мәктәбендә туған тел буйынса олимпиадаһы менән бер рәттән укыусыларҙың шиғыр һөйләүселәр конкурсы булып уҙҙы. Унда Арғаяш, Ҡоншак, Сосновка, Сыбаркүл райондары һәм Силәбе калаһынан барлығы 30 ашыу укыусы катнашты.***

“Әсәм теле — сәсән теле” тип исемләнгән шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе Арғаяш районында февралдә уҙғарылғайны. Был юлы әлеге ярышка өлкә күләмендә киңәйтелеп йомғак яһалды. Бәйге Башкортостандың 100 йыллығы һәм Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланды.



Был сара шағирҙың ижадына бағышланған презентация менән асылды. Мостай Кәрим тураһындағы видеосюжеттар залды йәнләндереп ебәрҙе. Дәрүиш мәктәбе укыусылары байрамға бик матур итеп әҙерләнгәндәр.

Бәйгелә укыусылар Мостай Кәрим шиғырҙарын, проза драма әсәрҙәренән өҙөктәр укынылар. Зәйнәб Биишева, Һәҙиә Дәүләтшина, Кәтибә Кинйәбулатова, Рәшит Ниғмәти, Рәми Ғарипов, Назар Нәжми һ.б. авторҙарҙың әсәрҙәре яңғыраны. Мәтәл урта мәктәбе укыусыһы камсат бүрекле Данияр Зарипов, мәсәлән, Сафуан Якшығолов тарафынан егермесе быуат башында яҙылған “Башкорт ағаларыма хитап” тигән шиғырын бигерәк аһәңле итеп һөйләне. Укытыусыһы Гөлфиә Хәмиҙуллина менән Данияр иçке шиғырға йән өргәндәр, заман рухына тап килеүе менән күңелдәрҙе һиҙкәндереп ебәрҙе. Көслө алкыштар Даниярҙың сығышына, моғайын, иң оло бүләк булғандыр.

Дөйөм алғанда, укыусылар был бәйгегә бик етди әҙерләнгәндәр. Майҙан хужаларын 8-се синыф укыусыһы Гөлназ Сибәғәтуллина якланы. Ул конкурска Рауил Бикбаевтың “Барып етһен ине хаттарым” шиғырын әҙерләгән, ул шуны айырым бер нәзәкәтлек менән мөккибән китеп тасури укығанда рәхәтләнеп тыңланык. Эйе, һәр бер укыусының сығышын тигәндәй оло тамаша кылып караны абруйлы жюри ағзалары.

Был конкурс туған телде үçтереү эшендә ысын мәғәнәһендә күңел байрамы һәм сәнғәтле балкыш булды. Ошондай байрамдар күберәк булһын ине. Матур күңел байрамы бүләк иткәне өсөн Арғаяш район мәғариф бүлеге методисы Гөлнур Рәмзис кыҙы Муллағәләмоваға рәхмәт!

5-6 синыфтар араһында башкорт телендә һөйләүселәр араһында еңеүселәр: Вадим Нурмөхәмәтов (Байғаҙы урта мәктәбе, укытыусыһы Минсара Йомасолтанова) менән Вилиә Йыһангәрәева (Яраткол мәктәбе, Мәүжиҙә Кинйәбаева). Урыс телендә һөйләүселәр араһында: Ҡоншак районының Маяк мәктәбе укыусыһы Никита Әхмәтйәнов (етәксеһе Ғәбделнисә Мансурова). 7-се синыфтар араһында еңеүсе Дәрүиш мәктәбенән Гөлназ Сибәғәтуллина, юғары синыфтарҙа еңеүселәр тип Данияр Зарипов (Мәтәл урта мәктәбе), Аида Әбдрәшитова (Байрамғол, укытыусыһы Гөлфиә Рәхмәтуллина) табылды.

Быйыл беренсе тапкыр конкурста урыс телендә һөйләүселәр катнаштылар. Мәсәлән, был төркөмдә Силәбе калаһының 15-се һанлы интернат-мәктәбенән Лиана Илембаева (етәксеһе Алена Фаттахова) уңышлы сығыш яһаны. Ҡоншак районының Маяк мәктәбенән Сабрина Камалова призер булды. Юғары синыфтар араһында еңеүсе — Снежана Исмәғилева (Ҡоншак районы, Тәхәлем урта мәктәбе, етәксеһе Нәфисә Фәйзуллина).

Быйыл шиғыр һөйләүселәр конкурсы йәнләнде. Беҙҙең күңелдәрҙә ул якшылыкка һәм яктылыкка сакырыу булып матурлыкка әйҙәп торасак. Конкурсанттар Мәғариф министрлығы дипломдары менән бүләкләнде.

**Ҡамса МОРТАЗИН,**
**конкурстың жюри ағзаһы.**

Олимпиада

# Илһөйәрҙәр бәйгеһе

***2 мартта Дәрүиш урта мәктәбендә туған тел буйынса укыусыларҙың өлкә олимпиадаһы булып уҙҙы.***

Быйыл ул утыҙынсы тапкыр йошторолдо. Илһөйәрҙәр ярышы Рәсәй халыктарының туған телдәре йылына, Башкортостан Республикаһының 100 йыллығына һәм халык шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланды.

Силәбе дәүләт университеты доценты Ғәҙел Вәлиев шунса йылдар олимпиаданың алыштырғыһыҙ жюри рәйесе булып кала. Уның сафында Флүзә Ғайсина, Гөлнур Муллағәләмова һәм Ҡамса Мортазин кеүек фән кандидаттары. Был абруйлы төркөм туған тел укытыусыларының терәге лә, изге эшкә йән өрөүсеһе лә инде.

Был сараны укытыусылар ҙа, укыусылар ҙа ашкынып көтөп алалар. Арғаяш районы мәғариф бүлеге олимпиада хәрәкәтенә яуаплы карай, шуға күрә ул туған тел байрамын егерме йыл буйы матур итеп уҙғара. Быйыл бындай бәхет дәрбиштәр өлөшөнә төштө һәм мәктәп коллективы һынатманы.

Өлкә олимпиада талаптарына ярашлы укыусылар тәүҙә мәктәптәрҙә, унан һуң район ярыштарында һынау үтәләр. Улар шунан ғына өлкә олимпиадаһында катнашыу хокуғына эйә булалар. Өлкә олимпиадаһында бәйгеселәр йәштәренә карап ике категорияға бүленәләр: ярыш 8-9-сы һәм 10-11 синыф укыусылары араһында бара.

Арғаяштар быйыл да алдынғылыкты бирмәне. 10-11 синыф араһында еңеүсе — Байрамғол урта мәктәбе укыусыһы Аида Әбдрәшитова, призеры — Байғаҙы урта мәктәбе укыусыһы Регина Ғәйфулина. Ә бына 8-9 синыф араһында еңеүсе тип Яраткол урта мәктәбе укыусыһы Айлина Шәмсутдинова танылды. Ҡоншак районы Маяк урта мәктәбенең 8-се синыф укыусыһы Снежана Морданова призер булды.

Бына был укыусылар — уңғандар, ысын мәғәнәһендә телһөйәрҙәр. Улар Өфөлә төбәк-ара олимпиадала катнашыу хокуғын яуланылар. Беҙ уларға еңел булмаған һынауҙарҙа уңыштарға өлгәшеүҙәрен теләп калабыҙ.

**Гөлнур МУЛЛАҒӘЛӘМОВА,**
**Арғаяш район мәғариф бүлеге методисы.**

Викторина

## “Башкортостан республикаһына — 100 йыл”

Гәзит редакцияһы “Башкортостан Республикаһына — 100 йыл” тигән викторина иғлан иткәйне. Әле йомғак яһалды. Был тарихи, иçтәлекле датаға бағышлап редакция викторинала катнашыусылар өсөн “түңәрәк өçтәл” ойоштора, унда йәнле һөйләшеү көтөлә һәм еңеүселәргә дипломдар тапшырыласак.

Викторинала еңеүсе — Вәрис Сиражетдинов. Икенсе урында Дәрүиш урта мәктәбе укытыусыһы Гөлсирә Фәхретдинова әҙерләгән укыусылар — Ирина Ишмәхәмәтова, Русалина Килмөхәмәтова, Гөлназ Сибәғәтуллина. Бәжекәй урта мәктәбенең башланғыс синыфтар укытыусыһы Гүзәл Фазылова өсөнсө урында.

“Восход” гәзите редакцияһы һәм Силәбе өлкәһенең Акмулла исемендәге әҙәби берекмәһе конкурсанттарға рәхмәт белдерә.